*Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН,*
*философия фәндәре докторы*



# УНИВЕРСИТЕТТЫҢ ГУМАНИТАР ҠӨҘРӘТЕ

1984 йылда СССР-ҙың биш техник юғары уҡыу йортонда ижтимағи фәндәр кафедраһының ғилми-тикшеренеү эштәрен, тәрбиә, белем биреү сифатын артабан яҡшыртыу, юғары квалификациялы белгестәр әҙерләү маҡсатында гуманитар факультеттар асылды.

Эксперимент үткәрелгән юғары уҡыу йорттары араһында Өфө авиация техник институты ла бар ине. Был осраҡлы ғына хәл булманы. Беренсенән, быға институттың ректорҙары Р.Р.Мәүлитов һәм унан ҡала бәйгене үҙ ҡулына алған С.Т.Кусимовтарҙың гуманитар фәндәргә ҡарата яҡшы ҡараштa тороуы сәбәпсе булды. Икенсенән, институт шул ваҡытта уҡ традицияларға бай ине. Бында республикабыҙ ғына түгел, бәлки ил күләмендә ғорурланырлыҡ, күренекле ғалимдар эшләне.

Өҫтәүенә, 60-сы йылдар башында институтта үҙ ғилми мәктәбенә нигеҙ һалған һәм 1966 йылда доктор исеменә лайыҡ булған оло ғалим Э.М.Чудинов етәкселегендә тәбиғәт фәндәренең фәлсәфәүи мәсьәләләре буйынса тикшеренеүҙәр киң ҡолас ала. Өфө социология мәктәбен төҙөүҙә философия фәндәре докторы, профессор Н.А. Айытовтың роле ҙур. Ул 1964 йылда институтҡа килеү менән философия һәм фәнни коммунизм кафедраһы барлыҡҡа килде. Кафедра киләсәктә илдә яҡшы билдәле социология лабораторияһын асып ебәрҙе.

Әгәр тәүге этапта социологик эҙләнеүҙәрҙә кафедраның үҙ уҡытыусылары, аспиранттарынан тыш, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡортостан медицина һәм ауыл хужалығы, Өфө нефть һәм Бөрө педагогия институттары ғалимдары ғына ҡатнашһа, 70-се йылдарҙа ғилми тикшеренеү проекттарын тормошҡа ашырыуға Мәскәүҙә, Ленинградта, Свердловскиҙа, Новосибирскиҙа, Ҡазанда урынлашҡан социологик үҙәктәр ҙә ҡушылып китте. Тикшеренеү рамкалары республика менән генә сикләнмәй, Мәскәү, Волгоград, Силәбе, Ырымбур кеүек өлкәләргә, Татарстан, Мордва республикалары киңлектәренә сығып китте. Шулай уҡ Европаның башҡа илдәрендә (Польша, Болгария) урынлашҡан социология үҙәктәре менән берлектә ғилми тикшеренеүҙәр

алып барыла башланы. Ошо осорҙа профессор Н.А.Айытовтың ҙур тырышлығы арҡаһында ғилми эштәр сит ил матбуғатында донья күрҙе.

1975 йылда институтта үҙаллы философия кафедраһы барлыҡҡа килеү менән профессор С.Ф.Елисеев етекселегендә хеҙмәт мәсьәләләрен философик күҙлектән тикшереүгә, йәмғиәттең социаль һәм профессиональ төҙөлөшөн, ғилми-техник прогресс һөҙөмтәләрен өйрәнеүгә иғтибар көсәйҙе.

Сәйәси иҡтисад өлкәһендә ғилми-тикшеренеү эштәре менән иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент М.Х. Хәкимов һәм иҡтисад фәндәре докторы, профессор Д.А.Смолдырев етәкселек итте.

Тарих кафедраһында сәнәғәт һәм ауыл хужалығын, иҡтисади һәм аграр сәйәсәт үҫеше тарихын тикшереүҙәр профессор Ғ.Ш.Илишевтың ҡул аҫтында барҙы. Ошо быуын ғалимдарының Башҡортостанда сыҡҡан ғилми эштәре үҙәктә генә түгел, ә урындағы юғары уҡыу йорто матбуғатында ла гуманитар фәндәрҙең үҫеш күренешенә, йәмғиәтебеҙҙең дөйөм фекер алышыу өлкәһенә әүерелде. Был традициялар бөгөн дә уңышлы дауам ителә.

Әле гуманитар факультет составына культурология һәм Ватан тарихы, философия, социология, политология, иҡтисад теорияһы кафедралары, социология лабораторияһы инә. Оҙаҡ ваҡыт факультетта уҡыу залы, ижтимағи фәндәр кабинеты эшләп килде. Ул студенттар менән дәрестән тыш осрашыуҙар, ҡыҙыу фекер алышыуҙар, ғилми тикшереүҙәр үҙәге булып торҙо.

Факультетта 14 фән докторы эшләй. Әйтергә кәрәк, гуманитар профилдағы юғары квалификациялы белгестәр ил буйынса бер техник юғары уҡыу йортонда ла шул саҡлы юҡ.

Беҙҙең факультет асылыу менән университетта уҡытыуҙың һәм тикшеренеү эшмәкәрлегенең яңы осоро башланды. Был бигерәк тә лекция һәм семинар дәрестәре үҙгәреүендә, уҡыу программаларының яңырып тороуында теорияның практика менән тығыҙ бәйләнешендә асыҡ күренә. Университеттың бөгөнгө уҡытыу процесы элеккеһенән ныҡ айырыла. Бында төп иғтибар хәбәр итеүгә ҡоролған дәрестәрҙе иҫләп ҡалыуҙан тыш, уй-фекерҙе үҫтереүгә, социаль, иҡтисади, сәйәси мәсьәләләрҙе ирекле рәүештә хәл итергә өйрәнеүгә йүнәлтелә.

Студенттарҙың уҡыу процесы уларҙың киләсәк эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйләнештә алып барыла. Әйткәнде нығытып, «Дәүләт һәм муниципаль етәкселек» һөнәре буйынса үткәрелгән дәрестәрҙе, информатика һәм робот техникаһы факультетында математик фекерләүҙе ғилми тикшеренеү процесында ҡулланыу, автоматик-техник системалар һәм авиация приборҙарын төҙөү факультетында «үҫешеүсе системаларҙың философик мәсьәләләре» буйынса үткәрелгән курстарҙы, экономистарҙа хәҙерге сәнәғәттә баҙар мөнәсәбәттәренең үҫеше хаҡындағы әңгәмәләрҙе һанап күрһәтергә мөмкин.

Уҡытыусы, профессорҙар коллективының юғары квалификациялы булыуы бөтә кафедраларҙа ла хәҙерге дәүләт белем биреү талаптарына яуап биргән, урындағы материалдарға тура килгән үҙ уҡыу әсбаптарын сығарыуға мөмкинселек бирҙе. Философия һәм Ватан тарихы кафедраһы Интернетҡа индерелгән уҡыу әсбаптарын да киң файҙалана. Бөтә гуманитар факультет кафедраларында үҙ аспирантураһы эшләй, ә философия кафедраһында докторантура ла бар.

Быларҙың бөтәһе лә кафедраларҙы өмөтлө йәш белгестәр менән тулыландырырға ярҙам итә. Аспирант һәм докторанттарҙың барыһының да тиерлек уҡыуҙарын диссертация яҡлап тамамлауҙары кафедра эшенең уңышын яҡшы сағылдыра. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, һуңғы 10-15 йылда тик философия кафедраһында ғына 18 доктор һәм 50-гә яҡын аспирант диссертацияларын уңышлы яҡланы.

Әлеге ваҡытта факультетта 30-ҙан артыҡ аспирант һәм бер нисә докторант бар. Уларҙың киләсәктә Башҡортостан социаль-философик һәм социологик мәктәбенең бәҫен тағы ла юғары күтәрәсәктәренә беҙ тулыһынса ышанабыҙ. Илебеҙҙең күренекле белгестәре Өфө дәүләт авиация техник университетының гуманитар факультетын Рәсәйҙең социаль-философик һәм социологик фекерләү үҙәге тип атай. Күрәһең, был беҙҙең дөйөм тикшереү программаһын төҙөүгә өлгәшерлек һәм уларҙы тормошҡа ашырырлыҡ коллектив менән бәйлелер. Төҙөлгән программалар мәсьәләләрҙе дөйөм ҡарарға һәм уларҙың өҫтөнлөгөн билдәләргә, һәр бер ғилми йүнәлештәрҙең прогностик функцияларын ки-

ңәйтергә, ғилми тикшеренеү эшмәкәрлеген ойоштороорға һәм финанслауҙы юлға һалырға нығ ярҙам итте. Бындай шарттар, башҡа социаль институттар менән сағыштырғанда, күпселек осраҡта университеттарҙа ғына осрай. Шуға күрә беҙ уларҙы фәнни эштәребеҙҙә киңерәк файҙаланырға тырыштыҡ. Күреүегеҙсә, эшебеҙ һөҙөмтәһеҙ ҡалманы.

1992-1997 йылдарҙа факультет «Башҡортостан Республикаһында социаль үҫеш: социологик, сәйәси һәм хоҡуҡи мәсьәләләр» исемле ғилми тикшеренеү программаһы буйынса төп ойошма булып сығыш яһаны. Факультет коллективы «Ижтимағи фекер», «Төрки халыҡтарын тергеҙеү» кеүек Бөтә Рәсәй программаларынан да ситтә ҡалманы.

Рәсәйҙең Фән буйынса дәүләт комитеты тарафынан философия кафедраһына илебеҙҙең 200-ҙән ашыу юғары уҡыу йорто ҡатнашҡан «Рәсәй халҡы: тергеҙеү һәм үҫтереү» исемле ғилми-тикшеренеү программаһының «Социаль һәм сәйәси мөнәсәбәттәр» бүлегенә етәкселек итеү бурысы йөкмәтелде. Факультетта үҙенсәлекле һәм актуаль булған тикшеренеү проекттарын яҡлауға бүленгән Рәсәй гранттары бар. Уларҙың эштәренең һөҙөмтәләре һуңғы йылдарҙа сыҡҡан монографияларҙа сағыла.

Факультет ғалимдары теорияны үҫтереү менән генә мауығып ҡалмай, ғәмәли мәсьәләрҙе лә хәл итеүгә ҙур көс һала. Мәҫәлән, 1970 йылда коллектив бөтә иғтибарын ҡалаларҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең социаль үҫешен күтәреүгә йүнәлтһә, хәҙер был ҡараш тулыһынса үҙгәрҙе. Бөгөн уҡытыусылар коллективы конституция, закондар проектын, указ һәм хөкүмәт ҡарарҙарын тикшереүҙә әүҙем ҡатнаша: иҡтисади, социаль, сәйәси бәйләнештәр буйынса аналитик яҙмалар тәҡдим итә, республиканың етәксе органдарының һорауҙары буйынса ғәмәли тикшеренеүҙәр ҙә алып бара. халҡыбыҙ хәтерендә Башҡортостан Республикаһының суверенитетын ҡабул итеүсе закондар актын барлыҡҡа килтереүҙә, Рәсәй федераль органдары менән килешеү төҙөүҙә һәм Башҡортостанда президент вазифаһын булдырыуҙа дәррәү ҡатнашыусы ҡайһы бер профессорҙарҙың исемдәре халҡыбыҙ хәтерендә.

Факультет Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге менән, шулай уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан, Төмән, Новосибирск, Һамар, Пермь, Томск, Хабаровск, Яҡутск кеүек ҡалаларҙың ғилми-тикшеренеү учреждениелары, юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Рәсәй Фәндәр академияһы һәм Өфө ғилми үҙәгенең «Башҡортостан халҡы», «Башҡортостан Республикаһында социаль реформа» программаларын тормошҡа ашырыуҙа Өфө дәүләт авиация техник университетының гуманитар факультеты хеҙмәткәрҙәренең роле ҙур.

Факультетта бөтә донъя илдәре менән бәйләнеш киңәйә төштө. Беҙгә АҠШ, Англия, Германия, Ҡытай, Франция, Венгрия, Польша университеттарынан вәкилдәр килгәне бар. Шулай уҡ беҙ үҙебеҙ ҙә халыҡ-ара конференцияларҙа, АҠШ-та, Германияла, Төркиәлә, Францияла, Швейцарияла, Венгрияла, Грецияла, Кипрҙа уҙғарылған конгрестарҙа ҡатнашабыҙ. Факультетта Англия, Франция, Төркиә, Болгария ғалимдары менән бергә ғилми тикшеренеүҙәр үтә. Күп осраҡта беҙҙең ғалимдар үҙ концепцияларына нигеҙләнгән был тикшеренеүҙәрҙе ойоштороусы булып торалар. Шуға ла һуңғы йылдарҙа беҙҙең факультет ғалимдары сит ил коллегаларына үҙ тәжрибәләрен бүлеүсе булараҡ сығыш яһаны.

Шул уҡ ваҡытта философик фекерләүҙең киләсәк үҫеше университет йәки республика етәкселегенән генә тормай, ә ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең, уҡытыусыларҙың кадрҙар составы менән тығыҙ бәйле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге осорҙа юғары уҡыу йорттарын финанслауҙың кәмеүе ижтимағи фәндәрҙең ҡыҫҡарыуына килтерҙе. Был, үҙ сиратында, белем кимәленең кәмеүенә, предприятие һәм учреждениеларҙа илебеҙҙе күтәрә алырлыҡ яҡшы кадрҙарҙың аҙайыуына алып килә. Шуға ла, йәмғиәтебеҙ сәскә атһын өсөн, Рәсәйҙә юғары белем биреү системаһын үҫтереү, уның гуманитар элементтарын һаҡлау мотлаҡ.